# Иртәлектәр өсөн шиғырҙар, йырҙар

## (Көҙ байрамы)

**Шиғырҙар**

Көҙгө ҡояш шаян икән
Күренә лә юғала
Нисек шулай көн буйына
Арымай уйнай ала
Ҡасма ҡабат ҡасма ҡояш
Нурҙарыңды түк инде
Болотҡа йәшенгәнеңде
Белеп торам бит инде.

Көҙ биҙәгән еркәйемде мең биҙәккә
Әллә япраҡ оса әллә елбәҙәктәр
Эй килешә һары күлдәк ҡайындарға
Ә миләштәр ялҡын яулыҡ ябынғандар
Йондоҙ булып балҡый көҙ гөлдәре
Бигерәк матур тыуған ерем миҙгелдәре.

Әле ҡойоп ямғыр яуа
Әле һалҡын ҡар төшә
Өҙөлмәҫкә теләп япраҡ
Елдәр менән тартыша.
Ел тырыша ботаҡтарҙа
Һары япраҡ ҡалмаһын

Көскә-көскә өҫтөрәй көҙ

Япраҡ тулы арбаһын.

Көнө-төнө япраҡ яуа

Ишек алдын һаҡлай ул

Өйөрөлә гүйә бынан

Башҡа урын тапмай ул

Һепертке алам да мин

Сығам урам буйына

Был япраҡтар сәскә кеүек

Һары ғына,ал ғына.

Төнө буйы ямғыр яуа

Мөрйәлә ел олоно

Шәрә ятып ҡалды хәҙер

Ағастарҙың олоно.

Осень краски взяла

И начала рисовать

В старый лес забрела

И его не узнать

Пожелтел березняк

Яркий клен заалел

Красит осень в лесу

Все подряд в октябре.

В темный лес дремучий

Заглянула осень

Сколько свежих шишек

У зеленых сосен

Сколько алых ягод

У лесной рябинки

Выросли волнушки

Прямо по тропинкею

Ағас баштары һап-һары

Йәшәрерҙәр яҙ булғас

Ә ниндәй шатлыҡ ҙур ҡыуаныс

Килгән тейенгә

Һикергеләп бейеп йөрөй

урман көйөнә

ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ йыйып

өйөнә илтә.

Көҙгө ҡояш сағыу,

әбейҙәр сыуағы

гөлләмәләй балҡый

миләштәр ҡыуағы

Алмалар алланды

Баландар балланды

Ҡыҙыл һары япраҡ

Ҡапланы яланды.

Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә

Шаян елдәр уйнап үтәләр

Суклы шәл ябынған ҡайындарҙың

Һары шәл суктарын һүтәләр.

Көҙ килде көҙ ағастарға,

Алып килгән бүләктәр

Ҡайһыһына һары яулыҡ

Ҡайһыһына күлдәктәр.

Ҡайын һары яулыҡ кейгән

Ни арала өлгөргән

Бүләк өләшкәндә ахыры

Ул беренсе йүгергән.

**Йомаҡтар.**

Ҡат-ҡат япраҡ,ятҡан ере тупраҡ(кәбеҫтә)

Ер аҫтында алтын ҡаҙыҡ,(кишер)

Өрмәй,һукмай,үҙе илата(һуған)

Үҙе һимеҙ майы юҡ,тиреһе ҡалын йөнө юҡ(кәбпеҫтә)

Яҙ килһә йәшәрә,көҙ килһә һарғая(япраҡ)

Алма тиһәң алалар,нимә һуң ул балалар(алма)

**Йырҙар.**

Осень наступила.

Осень,осень наступила

Листья осыпаются

Солнце летнее потемнело

Дождик начинается

Кап-кап на дорожке

Кап-кап на ладошке

Дождик землю поливай

С нами поиграй.

Паучки жучки и мошки

Прячутся скрываются

И в далекую дорогу

Птицы собираются.

**Көҙ етте.**

Йәй үтте,йәй үтте

Йәй үтте лә көҙ етте

Баҡсаларҙа ҡыҙарып

Тәмле алмалар беште

Һары-һары

Һары япраҡ ҡойола

Әллә инде,әллә инде

Ергә алтын ҡойола.

Ҡоштар,ҡоштар

Оса йылы яҡтарға

Яҙҙар еткәс тағы ҡоштар

Ҡайта беҙҙең яҡтарға.

**Көҙ килгән.**

Көҙ ктлгән,көҙ килгән

Көҙ быйыл бик тиҙ килгән

Ҡайындар тирәктәр гөлдәр

Һарынан күлдәк кейгән.

Көҙ килгән,тиҙ килгәг

Тиҙ килгәнен кем белгән

Көҙ бит һорап та тормайса

Баҡсаға барып ингән.